**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**Муниципальный район Ишимбайский райо  Республики Башкортостан**

**МБОУ СОШ с.Макарово МР Ишимбайский район РБ**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| Руководитель ШМО нач.кл | Зам.директора по УВР | Директор школы |
| Г. М. Галиуллина | Г.А.Баймухаметова | Т.Р.Хисматуллина |
| Протокол №6 от «26»06. 2025 г. | | Приказ № 141 от «28»08.2025 г. |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

**(ID 6428626)**

**учебного предмета**

**«Родной язык( башкирский)»**

для обучающихся 1– 4 классов

**с. Макарово 2025**

**Аңлатма яҙыу.**

Башланғыс класта тәү башлап башҡорт телендә уҡырға, яҙырға өйрәтеү, башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнеү һәм уҡыу процесында социаль тәжрибә туплау уҡыу программаһы нигеҙендә тормошҡа ашырыла.

Икенсе быуын хөкүмәт стандарттарының талаптарына ярашлы бала башҡорт теле буйынса белем алыу менән бер рәттән яңы йәшәү шарттарына яраҡлы тормош тәжрибәһе тупларға, уңышлы уҡыусы һәм эшмәкәр шәхес сифаттарына эйә булырға тейеш.

Башланғыс мәктәптә тәү башлап грамотаға өйрәтеү осоронда уҡ уҡыусыны үрҙә бәйән ителгән йүнәлештәрҙә үҫтереү өсөн иркен мөмкинселектәр асыла, шарттар тыуҙырыла. Уҡытыусы тарафынан ошо йүнәлештә системалы ойошторолған эш уларҙы тулыһынса тормошҡа ашырыуға булышлыҡ итә.

Бала туған телендә аралаша, башҡа фәндәрҙе лә шул телдә өйрәнә. Әсә теле балаға аң- белемгә эйә булыу, мәғлүмәтле булыу, фекерләү һәм уҙ-ара арлашыусараһы ла булып хеҙмәт итә. Был йәһәттән башҡорт мәктәптәрендә әсә телен өйрәнеү предмет булараҡ уның бәйәһен арттыра һәм уҡытыусыға юғары талаптар ҡуя. Тыуған илебеҙ Рәсәй, республикабыҙ Башҡортостан, туған тел, халҡыбыҙ, башҡа милләт халҡы менән татыулыҡ, дуҫлыҡ, тирә-яҡ мөхит, уларҙы һаҡлау-яҡлау, башҡорт грамотаһына өйрәтеү һәм әсә теленең программаларының көнүҙәк темалары булып тора. Был программала башланғыс кластарҙа фән буйынса уҡытыу тематикаһы, уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе һәм уҡыусы үҙләштерергә тейеш булған универсаль уҡыу эш төрҙәре системаһы тәҡдим ителә.

**Уҡыу планы**

Уҡытыу башҡорт телендә ойошторолған мәктәптәргә тәҡдим ителгән был уҡыу программаһы Рәсәй федерацияһының дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары талаптарына, милли мәктәптәр өсөн эшкәртелгән уҡыу планына таянып ҡоролдо.

**Уҡыу йылына сәғәттәр һаны:**

**1-се класс.** Грамотаға өйрәтеү һәм “Башҡорт теле”. Бөтәһе йылына 99 сәғ.(33 аҙна )

Грамотаға өйрәнеү: бөтәһе 44 сәғәт. (22аҙна х 2сәғәт).

*”Башҡорт теле” – аҙнаға 2 сәғәт, бөтәһе 22 сәғәт (11 аҙна x2 сәғәт)

Программа материалы түбәндәге уҡыу әсбаптары нигеҙендә тормошҡа ашырыла:

**1-се класс.**

**Уҡыу йылының I ярты йыллығы.**

*”Әлифба” китабы (авторы ФШ.Сынбулатова);

*“Әлифба” дәреслегенә методик ҡулланма (авторы ФШ.Сынбулатова);

**II ярты йыллыҡ.**

*”Башҡорт теле” дәреслеге (авторы ФШ.Сынбулатова);

*“Башҡорт теле” дәреслегенә методик ҡулланма (авторы ФШ.Сынбулатова);

*”Тикшереү эштәре” дәфтәре(авторы ФШ.Сынбулатова) ярҙамында бүлекте, ҙур теманы тамамлағас йәки сирек аҙағында уҡыусыларҙың программа материалын үҙләштереү кимәлен (сифатын) өйрәнеү;

*Комплекслы предмет- ара тикшереү эштәре (авторы Ф. Ш.Сынбулатова). Бында уҡыу йылы аҙағында уҡыусыларҙың предмет һәм метапредмет өлкәһендәге белемдәрен тикшереү маҡсатында контроль эш материалдары тәҡдим ителә.

**Әсә теленә өйрәтеү программаһының төп принциптары.**

1.Һәр баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу.

2. Фәнни –теоритик белем биреү.

3.Баланың тәбиғәттән бирелгән, ата – бабалары булмышынан күскән ыңғай сифаттарын иҫәпкә алыу.

4. Әсә телен заманса аралашыу, коммуникатив эшмәкәрле мөнәсәбәт ҡороу ҡоралы итеп ҡулланыу.

5.Һәр баланы төрлө яҡлап өҙлөкһөҙ үҫтереү.

6. Баланың физик һәм психик һаулығын һаҡлау, нығытыу.

Дөйөм белем биреү буйынса икенсе быуын дәүләт стандарттары уҡыусылар һәм уҡытыусылар алдына **түбәндәге талаптарҙы һәм бурыстарҙы ҡуя:**

1. **Уҡыусыны уҡыу, белем алыу эшмәкәрлегенә өйрәтеү, фекерләү, аҡыл – аң ҡеуәһен үҫтереү, үҙен уратып алған һәр нәмәгә, күренешкә, хәл- ваҡиғаға –ҙенең ҡарашы, баһаһы булған шәхес итеп –ҫтереү.**
2. **Баланың аҡыл үҫешен тотҡарламау өсөн, уны үҙ телендә уҡытып алып китеү мөһим.**
3. **Телде аралашыу, кешеләр менән хеҙмәттәшлек итеү, мөнәсәбәт ҡороу ҡоралы итеп күҙаллап өйрәтеү.**
4. **Башланғыс мәктәптә туған тел уҡытыуҙы, уҡытыу- тәрбиә эшен халҡыбыҙҙың бай мираҫына ҡороу төп шарт булып тора.**
5. **Башланғыс мәктәптә уҡытылған башҡа фәндәрҙе – рус теле һәм уҡыу, тәбиғәтте өйрәнеү, математика, һынлы сәнғәт, музыка өлкәһендәге белемдәрен һ.б. әсә теле фәне тығыҙ бәйләнештә уҡытыу мөҙим.**

**Грамотаға өйрәтеү.**

**Әлифба.**

**Бөтәһе 44сәғәт (22 аҙна х 2 сәғәт)**

- баланы уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү; тел, телмәр һәм әҙәбиәт ғилеме тураһында башланғыс төшөнсәләр биреү;
- һөйләү һәм яҙма телмәр курсының төп маҡсаты- уҡыусыны тәү башлап уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү.

Грамотаға өйрәтеү осоронда түбәндәге **мәсъәләләр** ҡуйыла:

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;телмәр һәм һөйләү сараларының йәшәйештәге әһәмиәтенә төшөнөү;
- уҡыу материалы, төрлө әҙәби әҫәрҙәр йөкмәткеһенигеҙендә тирә – чө мөхитте, йәмғиәтте өйрәнеү, кешене танып белеү, белем алыу;
- уҡыуға ҡыҙыҡһыныу, өҫҙемлек тәрбиәләү, граимотаға әйрәтеү осоронда универсаль эш алымдарына өйрәтеү;
- башҡорт грамотаҙына өйрәтеүҙе рус теле һәм уҡыу, тирә – яҡ тәбиғәтте өйрәнеү, һынлы сәнғәт һ.б. предметтар менән тығыҙ бәйләнештә (интеграция) алып барыу.

1. **Телмәр эшмәкәрлеге.** Телмәр тураһында төшөнсә. Һәйләң телмәре һәм яҙыу телмәре, телмәрҙең ғәмәли ҡулланылышы, мәғлүмәт биреү, аралашыу, мөнәсәбәт ҡороу.

   Тыңлау, уҡыу, һөйләү, яҙыу.

2. **Тел ғилеме.** Һүҙ тураһында башланғыс төшөнсәләр. Предмет һәм һүҙ. Һүҙҙең исем атау функцияһы. Уның телмәрҙәге әһәмиәте. Кеше исеме, телмәрҙәге әһәмиәте. Кеше исемен, фамилияһын белдергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр. Һүҙбәйләнеш. Уларҙы график тамғалау.

   Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Һүҙбәйләнеш. Уларҙы график тамғалау.

   Һөйләм. Уның схемаһы. Һ!йләм башы, аҙағы һәм уның аҙағында тыныш билдәләре (нөктә, һорау, өндәү).

   Йыйнаҡ һәм киңәйтелгән һөйләмдәр. Һөйләмде тулыландырыу, һүҙ өҫтәү.

   Текст. Уның мәғәнәһе, төп фекер. Уны тыңлау, һөйләү. Һүҙ һәм өн. Өн тураһында төшөнсә. Һүҙҙе әйтеү, тыңлау, тамғалау. Һүҙҙең өн моделе.

   Һуҙынҡы, тартынҡы өндәр. Нәҙек, ҡалын өндәр. Яңғырау, һаңғырау, тартынҡы өндәр.

   Ижек. Баҫым. Һөйләү, һөйләшеү, аралашыу мәҙәниәте.

   Хәреф. Хәреф- өндөң тамғаһы. Алфавит. Алфавит хәрефтәрен өйрәнеү. Уны ҡулланыу мөмкинселеге.

**Грамотаға өйрәтеү программаһын үҙләштереү.**

Грамотаға өйрәтеү процесында уҡыусы өйрәнергә тейеш:

1. **Балала шәхси сифаттар үҫтерергә.**

   Уҡыусы статусын ҡабул итергә, уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнергә. Тыуған илгә, ергә, телгә, яҡын кешеләргә һөйөү тәрбиәләргә. Эшләгән эштәр, ҡылыҡ- фиғел өсөн яуаплылыҡ тойорға. Һау сәләмәт йәшәйеш булдырырға.

2. **Предмет буйынса белем алырға.**

- Тел берәмектәрен айыра белергә;
- Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләмде график- символик тамғаярҙамында тамғаларға;
- Уҡырға (минутына 40-45 һүҙ);
- Хәрефтәрҙе тейешле каллиграфик режимда яҙырға, уларҙы бер- береһе менән дөрөҫ тоташтырырға.
- Һүҙ, һөйләм, текст уҡырға һәм яҙырға;

- 3-4, 5-6 хәрефтән торған ябай ғына һүҙҙәрҙе грамоталы яҙырға;
- Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылыш ҡағиҙәләрен ( орфограмма) белергә.

3. **Универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәнергә.**
   *уҡытыусыны тыңларға, уның әйткәнен ишетергә;
   *өндәрҙе әйтергә, тыңларға, сағыштырырға, анализларға;
   *уҡытыусыға һорау бирергә, белешмә алырға;
   *икешәрләп йәки төркөмләп класташтары менән эшләргә;
   *диалог барышында һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашырға, уның темаһын күҙ уңында тотоп, үҙ фекерен әйтергә, кешенекен тыңлларға
   *дәрестең темаһына ярашлы уҡыу мәсьәләһен ҡуйырғ. Уны сисеү маҡсатында тикшереү эшендә әүҙем ҡатнашырға;
   *график – символик һыҙмаларҙы танырға: һүҙҙең өн (хәреф) моделен, һөйләмдең һыҙмаһын төҙөргә һәм уҡырға;
   *уҡыу һәм яҙыуҙы мәғлүмәт, белем алыу мөмкинселеге итеп ҡулланырға

**Программа материалы түбәндәге уҡыу әсбаптары нигеҙендә тормошҡа ашырыла:**

“Әлифба” дәреслеге ( авторҙары:Ф.Ш.Сынбулатова, Ы.Ә. Исламғолова, З.И. Яйҡарова)

“Әлифба” дәреслегенә методик ҡулланма (авторы Ф.Ш.Сынбулатова)

1-4 кластарҙа диктанттар йыйынтығы һәм тиешерең эштәре( Ф.Ш. Сынбулатова, Р.Ф.Нурыева, Г.Б.Ғәлиуллина)

Әлифба һәм Әсә теле 1-4 кластарҙа программаһы (Ф.Ш.Сынбулатова, Г.Ә Вәлиева), «Мәғариф тураһындағы закон»ға, Рәсәй Федерацияһының икенсе быуын дөйөм белем биреү хөкүмәт стандарттарына, «Башҡортостан халыҡтары телдәре законы »,«Башҡорт мәғарифты үҫтереү концепцияһы » һәм башҡа норматив документтарға таянып эшләнде

## I. Башҡорт теле
### 1-се класс. Бөтәһе 22 сәғәт.

Уҡыу йылының икенсе яртыһында “Башҡорт теле” курсын өйрәнеү программаһына ярашлы грамотаға өйрәтеү осоронда алған уҡыу, яҙыу күнекмәләрен һәм төҙмәрләнә башлаған универсаль эш алымдары оҫталығын артабан үҫтереү маҡсаты ҡуйыла:

Уҡыу йылының тәүге ярты йыллығында телмәр эшмәкәрлег өлкәһендә өлгәшкән күрһәткестәр1- се класс аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләргә ярашлы артабан камиллаштырыуҙы талап итә.

“Әсә теле”н өйрәнеү осоронда түбәндәге мәсьәләләр ҡуйылы:

- баланы тәү башлап уҡырға, яҙырға өйрәтеү күнекмәһен , оҫталығын артабан үҫтереү;
- - тел ғилеме өлкәһендә алған башланғыс төшөнсәләрҙе аңлы эшкәртеү процессын әүҙемләштереү;
- - һөйләү, яҙма телмәрҙе ғәмәли ҡулланыу;
- - универсаль уҡыу эш алымдарын үҙләштереүҙе интенсивлаштырыу.

1. **Телмәр эшмәкәрлеге**.

Телмәрҙе **тыңлау, ишетеү, аңлау**.

Кешенең өндәшеүен тыңлау, төшөнөү, ситуацияға ярашлы ҡабул итеү һәм эш итеү.

**Уҡыу.** Уҡыу оҫталығын шымартыу. Аңлы, шыма уҡыу. Тасуири уҡыу. Уҡыу күнекмәһен мәғлүмәт, белем алыу сығанағы итеп ҡулланыу.

**Һөйләү телмәрен** белем алыу сараһы итеп ҡуллана белеү. Аралшыу оҫталығы башланғысын артабан үҫтереү.

Телмәр этикетына өйрәнеүҙе дауам итеү. Һөйләмде дөрөҫ төҙөп һөйләшеү. Һөйләмде дөрөҫ интонация менән , таҙа, дөрөҫ итеп әйтеү.

Ниндәйһер предмет, күренеш, хәл- ваҡиғаға ярашлы мәғлүмәт алыу маҡсатында һорау һөйләм төҙөргә өйрәтеү. Уны әңгәмәсегә биреп, тыңлап анализлау.

**Яҙма телмәр**. Бәйләнешле яҙма телмәр төҙөү оҫталығына өйрәнеү өлкәһендәге башланғыс күнекмәләрҙе үҫтереү.

Һөйләм һәм текст төҙөлөшө. Һөйләм төҙөү. Фәнни – популяр текст, иғлан белдермә(записка), ҡотлау һңҙҙәре (открытка яҙыу). Ҡыҙыл юл, абзац төшөнсәһе.

Синоним, антоним менән танышыу. Һүҙҙең күп мәғәнәлеге.

**Матур яҙыу.** Дәресте 4-5 минут ваҡытты дөрөҫ каллиграфия менән яҙыуға бағышлау. Юл һәм ҙур хәрефтәрҙең яҙылышына даими күнекмәләр үткәрелә, камиллаштырыла. Һүҙлек һүҙҙәрен яҙыу. Һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе тиҙ яҙыу оҫталығын үҙләштереү. Контроль күсереп яҙыу.

2. **Тел ғилеме.**

Һөйләм. Һүҙҙәр теҙмәһе, йыйылмаһы, мәғәнә. Һүҙбәйләнеш. Һөйләмде сағыштырыу. Һөйләмгә хас үҙенсәлектәр (мәғәнә – фекер, интонация) . Әйтелеү маҡсатына ҡарап һөйләм төрҙәрен үҙләштереү; хәбәр, һору, өндәү. Һөйләмде дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре: ҙур хәреф, аҙағында тыныш билдәләре.

Һүҙ. Һүҙ төркөмдәре. Предметтың атамаһын, хәрәкәтен,белдергән һүҙҙәр. Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ предмет атамалары(исемдәр). Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе ҙур хәрефтән яҙыу.

Алфавит. Унда хәрефтәр тәртибе. Алфавитты ҡулланыу.

Өн. Хәреф. Һүҙҙең өн структураһы һәм мәғәнәһе араһындағы бәйләнеш.

Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Ижек. Һүҙҙе юлдан – юлға күсереү өсөн ижеккә бүлеү. Нәҙек, ҡалын һуҙынҡылар. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙып өйрәнеү. Орфограммалар.

3. **Универсаль уҡыу эш төрҙәре.**

Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү. Үҙ аллы белем алыу, мәғлүмәтле булыу. Уҡыу мәсъәләһе ҡуйыу. Маҡсатты күҙаллау. Эште планлаштырыу.Тикшереү эшен ойоштороу. Уҡыу объекттарын күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау. Эшләнелгән эшкә байҡау яһау. Контроль. Эште баһалау

## 1 – се класс аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр

“Әсә теле” программаһын өйрәнеү процессында уҡыусы өйрәнергә тейеш :

1. **Шәхси сифаттарҙы үҫтерергә;**

- уҡыу процесында белем алыуға ҡарата яуаплылыҡ булдырырға: тиҫтерҙәренә, уҡытыусыға ҡарата ихтирамлы булырға;
- мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡараш булдырырға;

- тыуған ил, ер, тел төшөнсәләре тураһында аң – белем бирергә;
- һау – сәләмәт йәшәү рәүешен үҙләштерергә.

2. **Предмет буйынса белем алырға.**

- һүҙҙәрҙе мәғәнәүи яҡтан төркөмләргә(предметтың атамаһын, билдәһен, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр);
- һөйләм төрҙәрен билдәләргә(хәбәр, һорау, өндәү)һәм уларҙы тейешле интонация менән уҡырға; һөйләмде дөрөҫ яҙырға.
- үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙе айыра, таный белергә; һөйләмде күсереп яҙғанда ярҙамсы һүҙҙәрҙе (да-дә, та-тә, ла-лә, ғына –генә, ҡына – кенә)билдәләргә һәм дөрөҫ яҙылышн аңлата белергә;
- предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәрҙе уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәргә айыра белергә;
- фамилияһын, ер- һыу атамаларын, хайуан ҡушаматтарынҙур хәрефтән яҙырға;
- өндәрҙе һуҙынҡы, тартынҡыларға айырырға, нәҙек, ҡалын һуҙынҡыларҙы, парлы яңғырау – һаңғырау, парһыҙ яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы дөрөҫ билдәләргә, график рәүештә тамғаларға;
- һүҙҙең (3-4, 5-6 өндән торған) өн моделен төҙөргә;
- 6-7, 7-8 һөйләмдән торған (30 – 35 һүҙ) тексты күсереп яҙырға;
- 25 – 30 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙа белергә;
- о-ө, у-ү, э (һүҙ башы)хәрефтәре, йә, йө, йү, йе (һүҙ уртаһы), йо, йы ҡушымсалары булған һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға; һүҙ башында я, ю, е,ё хәрефтәре менән булған 2-3, 3-4 хәрефтән торған һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙырға; тартынҡы өндөң аҙағында килгән нәҙеклек билдәһен(ь) рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә (3-4, 4-5 хәрефле) дөрөҫ яҙырға;

3. **Универсаль укыу эш төрҙәрен үҙләштерергә:**

- үтенес менән уҡытыусыға, класташына, өлкәндәргә өндәшергә;
- укыу объектын өйрәнеү процесында күҙәтергә, сағыштырырға, анализларға һәм һығымта яһарға;
- аралашыу оҫталығын шымартыу; тыңларға, яуап бирергә; һорарға, кеше фекерен ихтирам итергә;
- диалог, монолог ҡора белергә;
- мәғлүмәт алыу сығанаҡтары менән эш итә белергә; алған мәғлүмәтте эшкәртә белергә, маҡсатҡа ярашлы ҡулланырға;
- мәғлүмәт алыу маҡсатында һорау һөйләм ҡорорға;
- парлап, төркөмдә эшләгәндә этикет ҡағиҙәләрен күҙәтергә, эште планлаштырырға, уны тормошҡа ашырырға;
- 3-4, 4-5 һөйләмдән торған иғлан, ҡотлау, белдермәяҙа белергә.

## Әлифба дәрестәрен календарь-тематик планлаштырыу(дәреслек авторы Ф.Ш.Сынбулатова)
## Башҡорт теле (дәреслек авторы Ф.Ш.Сынбулатова)
## 1 КЛАСС

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| № | Темаурока | Количествочасов | Дата | По факту | Электронные циф |

| п/п | | Всего | Контрольные работы | Практические работы | изучения | | ресурсы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Предмет  һәм һүҙ | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 2 | Предметтың эш-хәрәкәте, уның төҫө, билдәһе | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 3 | Һөйләм. Һүҙбәйләнеш | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 4 | Өн. Һүҙ. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 5 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Ижек. Баҫым | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 6 | Һүҙ. Өн. Һүҙҙең өн моделе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 7 | Аа хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 8 | Әә хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 9 | Оохәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 10 | Өө хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 11 | Үү, Уу хәрефтәре. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 12 | Ээ хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 13 | Ыы хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 14 | Ии хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 15 | Мм хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 16 | Нн.хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 17 | ң хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 18 | Лл хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | / | https://infourok.ru |
| 19 | Рр хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 20 | Йй хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 21 | Йә, йө, йү, йо, йы ҡушымсалары менән һүҙҙәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 22 | Гг хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 | Кк хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 24 | Ғғ хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 25 | Ҡҡ хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 26 | Бб хәреф. Пп хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 27 | Зз хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 28 | Сс хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | / | https://infourok.ru |
| 29 | Ҙҙ хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 30 | ҫ хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | / | https://infourok.ru |
| 31 | Дд хәрефе.Тт хәрефе | 1 | 0 | 0 | | / | https://infourok.ru |
| 32 | Үү, Уу хәрефтәре. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 33 | Жж хәрефе. Шш хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 34 | Вв хәрефе. Фф хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 35 | Яя хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 36 | Юю хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 37 | Ее хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 38 | Ёё хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 39 | Нәҙекһәм ҡалынайырыу билдәләре.***(ь,ъ)*** | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 40 | Һһ хәреф. Хх хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 41 | Цц хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 42 | Щщ хәрефе. **Күсереп яҙыу.**“Емеш | 1 | 1 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 43 | Алфавит. Хәрефтәр иленә сәйәхәт. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 44 | **Тикшереү эше.** | 1 | 1 | 0 | | | https://infourok.ru |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 45 | Алфавит. Хәреф һәм өн | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 46 | Һуҙынҡы өндәр һәм хәрефтәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 47 | Тартынҡы өндәр һәм хәрефтәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 48 | Нәҙек һәм ҡалын әйтелешле һүҙҙәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 49 | Һүҙҙе ижеккә бүлеү. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 50 | Һүҙҙе юлдан юлға күсереү | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 51 | Ҙур(баш) хәреф. Кеше исем-фамилияларының яҙылышы. Хайуан ҡушаматтары. Ер-һыу атамалары. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 52 | Һөйләм. Хәбәр һөйләм. Өндәү һөйләм. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 53 | О-ө хәрефле һүҙҙәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 54 | У-ү хәрефле һүҙҙәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 55 | Э хәрефле һүҙҙәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 56 | Йй хәрефе ҡайҙа һәм ҡасан яҙыла? | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 57 | Үҙләштәрелгән һүҙҙәрҙә е, ю, я, ё хәрефтәре. | 1 | 0 | 0 | | / | https://infourok.ru |
| 58 | Юю, Ее, Яя хәрефе. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 59 | Һүҙ төркөмдәре. Предмет атамаһын белдергән һүҙҙәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 60 | Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 61 | Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 62 | Ярҙамсы һүҙҙәр:һәм, менән да-дә, ҙа-ҙә, та-тә, ла-лә, ғына-генә, ҡына-кенә | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 63 | **Контроль диктант.**“Йәй етә”. | 1 | 1 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 64 | Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 65 | **Күсереп яҙыу.** “Йорт ҡуяндары”. | 1 | 1 | 0 | | | https://infourok.ru |
| 66 | Һаумы, йәмле йәй!Йомғаҡлау. | 1 | 0 | 0 | | | https://infourok.ru |
| Барлығы | | 66 | 4 | 0 | | | |

**Программа материалы түбәндәге уҡыу әсбаптары нигеҙендә тормошҡа ашырыла:**

1.“Башҡорт теле” дәреслеге ( авторы Ф.Ш.Сынбулатова)

2.“Башҡорт теле ” дәреслегенә методик ҡулланма (авторы Ф.Ш.Сынбулатова)

3.“Башҡорт теле ” дәреслегенә эш дәфтәре ( авторы Ф.Ш.Сынбулатова)

4.1-4 кластарҙа диктанттар йыйынтығы һәм тикшереү эштәре( Ф.Ш. Сынбулатова, Р.Ф.Нурыева, Г.Б.Ғәлиуллина) .